*Закир ЗИННғТУЛЛИН*

# Башҡорттар, Зәрдөшт һәм Дәдә Коркут мираҫы

*Постсовет киңлегендә суверенлы дәүләттәр төҙөлөп, халыктар үҙ милли мәҙәниәтен үҫтереү юлындағы барлыҡ кәртәләрҙе алып ташлап, бығаса тиклем бер ҡасан да булмаған мөмкинлектәр яуланы. Был айырыуса төрки донъяһына ҡағыла — сәйәсмәндәр, тарихсылар, мәҙәниәт белгестәре лексиконында хатта «төрки ренессансы» төшөнсәһе әйләнешкә инде. 2000 йылдың йәйендә Әзербайжандың баш ҡалаһы Бакуҙа уҙғарылған «Китаби дәдә Коркут» (Коркуттың исемен ошолай — юбилейҙа ҡатнашҡан бөтә төрки илдәре вәкилдәре ҡулланғанса алайыҡ) эпосының 1300 йыллыҡ юбилейында ЮНЕСКО-ның элекке генераль директоры Фредерик Майор: «Төркиҙәр үҙ мәҙәни потенциалын әле саҡ донъя кимәленә сығара башланы. Бөгөнгө масс-культура, унификацияланған мәҙәниәт дәүерендә кешеләр үҙ тамырҙарына, ысын ҡиммәттәргә күберәк мөрәжәғәт итә. Был әҙәбиәттә, сәнғәттә көслө сағылыш таба. Төрки дәүләттәре ошо йүнәлештә эште көсәйтергә тейеш, ә Көнбайыш, халыҡ-ара ойошмалар асыҡ диалогҡа, плюрализмға һәр саҡ әҙер. Максат — һәр шәхестең, һәр милләттең барлыҡ потенциалын мөмкин тиклем нығыраҡ асыу», — тип сығыш яһағайны.*

Төрки мәҙәниәте, ысынлап та, әлегә донъя цивилизацияһы, донъя мәҙәниәте кимәлендә үҙен тулыһынса асмаған. Төрки халыҡтары мәҙәниәте өлкәһендәге проблемалар ҙа оҙаҡ ваҡыт, быуаттар буйына тупланып килгән. Дөйөм төрки үҫешенә ҡаршы тороусы көстәр әле тиҙ генә бирешергә йыйынмай. Тимәк, көстәрҙе берләштереү мөһим. «Китаби дәдә Коркут» эпосының Әзербайжанда уҙғарылған 1300 йыллыҡ оло юбилейы ысын мәғәнәһендә ошондай берләшеүҙең бер өлгөһө булды. Байрамда ҡатнашҡан үзбәк делегацияһы етәксеһе, Үзбәкстан Республикаһы Парламенты (Улуг Меджлис) рәйесе Эрлик Хәлил республикала оҙаҡламай «Авеста»ның 1700 йыллыҡ юбилейы үткәреләсәге тураһында белдергәс, был күптәрҙе ғәжәпләндергәйне, сөнки донъя фәнендә эпос әлегә тиклем ирандыҡы тип иҫәпләнә. Үзбәкстан вәкиле иһә: «Беҙҙең төркиҙәр күп ҡиммәттәрен юғалтҡан йә улар хәҙер башҡа халыҡтарҙыҡы тип иҫәпләнә. Ныҡлабыраҡ ҡараһаң, иран, герман, грек, рим мифологияһы ҡомартҡыларының күбеһенең нигеҙендә төркиҙеке ятҡанын күрәһең. Мәҫәлән, ирандыҡы тип иҫәпләнгән «Авеста» — төркиҙеке лә. Хатта ул, ирандыҡы булыуға ҡарағанда, күберәк төркиҙеке. Ләкин беҙгә тарихты бүлешә башлау килешмәй, һәм шуға күрә «Авеста»ның 1700 йыллыҡ оло юбилейын иң яҡын күршеләребеҙ — тажиктар һәм башҡа иран халыҡтары менән бергә байрам итәсәкбеҙ. Был ниңә мөһим? Үҙ милләтен, дәүләтен хәстәрләгән кешеләр иң тәүҙә үҙ тамырҙарын һаҡларға тейеш», — тип белдерҙе. Форумда Әзербайжан президенты Гейдар Алиев, Ҡаҙағ-

стан президенты Нурсолтан Назарбаев, Ҡырғыҙстан президенты Асҡар Акаев, Төркиә президенты Сөләймән Демирель, барлыҡ төрки дәүләттәренән яҙыусылар, ғалимдар, Көнбайыш илдәренән килгән ҡунаҡтар ҡатнашыуы уның абруйын планетар кимәлгә күтәрҙе. Ҡыҙғаныսҡа ҡаршы, Башҡортостандан унда журналист Фәрзәнә Аҡбулатова ғына булды (һәр хәлдә, юбилей тураһында материал алып ҡайтып, республика халҡына еткереүсе бер ул булды шикелле), Өфө йәмәғәтселеге ошондай ҙур сараға битараф ҡалды. Яҙыусы-прозаик, Ш.Бабич исемендәге премия лауреаты, журналист Ф.Аҡбулатова Бакуға визитҡа өс йыл алдан, 1997 йылдың йәйендә үк әҙерләнә башланы. Ошо әҙерлектә Әзербайжан этнографик йәмғиәтенең етәксеһе, йәш ғалимә Гюллу Елоглу ҙур ярҙам күрһәтте. «Ватандаш» уҡыусыларына тәҡдим ителгән материал Фәрзәнә менән Гюллу ярҙамында тупланды. Ул күптәргә файҙалы булыр тип ышанабыҙ. Иң тәүҙә әҙәптәребеҙгә һәм, әлбиттә, тарих менән ҡыҙыҡһыныусыларға: бөтә донъя кимәлендәге ҡомартҡыларҙы, улар менән бәйле бөйөк шәхестәрҙе белмәй тороп, донъя әҙәбиәтендәге, поэзиялағы дөйөм хәлде, контексты аңлау, шунһыҙ уңышлы ижад итеү мөмкин түгел. Беҙҙе әлегә донъяла белмәйҙәр, беҙ донъяны белмәйбеҙ. Әҙиптәребеҙ һуңғы ваҡытта тәңресселек, зәрҙөштилек дәүеренә йыш мөрәжәғәт итә, әммә аныҡлыҡ етешмәй. Киреһенсә, мәжүсилек, тәңреселек, зәрҙөштилек элементтарын, улар менән бәйле төшөнсәләрҙе бутап ижад итә. Тимәк, бөгөнгө көндә уларға дәғүәләр бик ҙур. Һуңғы йылдарҙа Германияла, Францияла, Төркиәлә, Эстонияла, Үзбәкстанда уҙғарылған халыҡ-ара тюркологик конгрестарҙа, мәҫәлән, Әзербайжан ғалимдарының эштәре, айырыуса «Китаби дәдә Коркут»ҡа арналғандары иғтибар үҙәгендә булды. Әзербайжандар эпос тураһында бөтәһе 70 китап нәшер итә һәм 150-нән ашыу монография әҙерләй.

Һуңғы йылдарҙа донъя тюркологияһы һынылыш мәле кисерә. Үҙгәрештәр — ыңғай яҡҡа. Көнбайыш ғалимдары, мәҫәлән, грек, рим, герман мифологияһының тамырҙарын төрки мифологияһында эҙләй башланы. Улай ғына ла түгел, күптәр төркиҙекен боронғораҡ тип күрһәтә. Әммә Көнбайыштың ролен дә тейешенсә баһалай белеү кәрәк. Мәҫәлән, инглиз ғалимы Вест хеҙмәттәрен белмәй тороп, «Авеста» тураһында һүҙ йөрөтөү ҙә мөмкин түгел. Ә немец ғалимы Фридрих Кристиан Диц 1815 йылда Дрезден музейы китапханаһындағы берҙән-бер ҡулъяҙмаға юлыҡмаһа һәм бөтә донъя йәмәғәтселегенә иғтибарына тәҡдим итмәһә, төркиҙәр өсөн ул ниндәй ҙур юғалтыу булыр ине. Ул ҡомартҡылар — үҙҙәре бер ҙур философик концепция, донъя ҡоролошон үҙенсә аңлатҡан тәғлимәт. «Китаби дәдә Коркут»ты өйрәнгән һәм тәржемә иткән В.В. Бартольдт уны төркиҙәрҙең оло китабы һәм төркиҙәрҙең һәр береһе әҫәр менән үҙ телендә танышырға тейеш тип күрһәтә. Беҙ ата-бабаларыбыҙ алдында бурыслыбыҙ. Шул бурыстарҙы ҡайтара башларға ваҡыт. Был ҙур эш һөрөлмәгән сиҙәмде асыу һымаҡ процесс. Әлегә беҙ боронғо ата-бабаларыбыҙ тормошонoң ул мәлдәге хәл иткес мөһим элементын — дини яғына ҡағылышлы хронологияны барлап үтәйек. Шул саҡта беҙгә башҡорт әҙәбиәтендә һәм тарих фәнендә палеографияға иғтибарҙы арттырыу кәрәклеге лә бик асыҡ төҫмөрләнер.

Төркиҙәрҙең тарихында иң тәрән эҙ ҡалдырған шәхестәр исемлеген Коркут менән йәнәшә Зәрдөштө (Язданды) ҡуйып башларға мөмкиндер. Ә уларҙың исемдәре тәңреселек һәм зәрдөштилек диндәре донъяға килеүе, һөҙөмтәлә Евразия киңлектәрендә ифрат ҙур халыҡ массалары хәрәкәткә килеүе, ҙур һуғыштар башланыуы, яңы милләттәр тупланыуы менән бәйле. Ошо оҙайлы дәүерҙә беҙҙең башҡорт халҡына нигеҙ һалған төп элементтар ҙа формалаша: зәрдөштилек дәүерендә уға тиклем фин-уғырҙар йәшәгән территорияла иран элементы ишәйһә, тәңреселек төркиҙәргә юл аса. Зәрдөштилек менән тәңреселек факторҙарын иҫәпкә

алһаң, тарихи ваҡыт һәм киңлек менән бәйле фактологик категориялар ҙа асығыраҡ төҫмөрләнә башлай. Ә улар һәр кемдән ихтирамлы мөнәсәбәт талап итә — тарихсынан да, әҙиптән дә.

* * *

Зәрдөштилек дине б.э.т. 600 йылдан алып беҙҙең эраның 300 йылына тиклем, йәғни туғыҙ быуат дауамында өҫтөнлөк итә. Был дәүер Зәрдөшт шәхесе һәм исеме менән бәйле. Көнбайыш фәне (иң тәүҙә «Зороастризм мөғжизәләре» хеҙмәте авторы, инглиз ғалимы Вест) раҫлауынса, Зәрдөшт б.э.т. 660-583 йылдарҙа йәшәгән. Иран сығанаҡтары араһында иң мөһиме, әлбиттә, «Авеста». Пехлеви китаптары «Динкард» менән «Зат-Спарам», хронологик йәһәттән мөһим «Бундехеш», «Дамдат» мәғлүмәттәре ғәрәптәр Мәсүди, Әл-Буруни яҙғандарға тап килә. Классикала Зәрдөшт (Заратустра, Зороастр) исеме Платондың «Алкивиад» әҫәрҙәрендә иҫкә алына.

Зәрдөштөң тыуған иле тип Атропатена күрһәтелә. Атропатена — ул бөгөнгө Әзербайжан (Ирандағы өлөшө менән бергә). Ул Урмия күле буйында, әзербайжандар араһында тыуып үҫә. Атаһы — әзербайжандарҙың Спитама тармағынан, әсәһе — Мидиянан. «Бундехеш», «Динкард», «Виджарт-и-Диниг» китаптары, шулай уҡ Мәсүди раҫлауынса, Зәрдөштөң атаһы Поурушасп ирандарҙың бөйөк шәхесе Манучихр (Манушчихар) нәҫеленән, уның 15-се быуын ейәне була (Спитам, йәғни Спитаман иһә — 5-се быуын). Зөрдөштө шуға күрә ололап Заратуштра Спитама тип йөрөтәләр. «Авеста» китабында уның әсәһенең исеме Дугхдхова тип күрһәтелгән, ул Мидияның Рахга төбәге ҡыҙы. Дугхдхова менән Поурушасп ғаиләһендә биш малай үҫә: Ратуштар, Рангуштар, Заратуштра, Нотарига һәм Ниветиш. Был мәғлүмәт «Зат-Спарам»да бирелә, ә башҡа ҡайһы бер сығанаҡтарға ярашлы, ғаиләлә тағы ла ике бала тыуып, улары иртә үлә. «Динкард» һәм «Бундехеш» раҫлауынса, Заратуштра бәләкәй сағында әсәһенең ағаһы Фрахимраваның улы Майдхьой-Маонху менән аралашып үҫә.

Зәрдөшт б.э.т. 660 йылда тыуып, 583 йылда үлә. Уның өс ҡатыны, өс ҡыҙы, өс улы була.

Зәрдөштөң бала сағы тураһында Авестаның «Спенд-Наск» китабында яҙыла, әммә ул китап һаҡланмай — ундағы мәғлүмәттәр аҙаҡ «Динкард», «Зат-Спарам» һәм «Зардуштнамә» китаптарында иҫкә алына. 7 йәше тулыу менән Зәрдөштө Бурзян-Курус исемле остазға тәрбиәгә бирәләр. Зәрдөшт бәләкәй сағында Яздан исемен дә йөрөтә — был уның ысын исеме булыуы ла ихтимал. Ул заманда икенсе — йәшерен исем ҡушыу ғәҙәти күренеш була. Заратуштра исеме «уҫал дөйә» тигәнде аңлата, ә Спитаман — «аҡ кеше». Зороастр иһә — гректарҙа ҡабул ителгән формаһынан (Зороастрес).

Бурзян-Курус Зәрдөштө грамотаға һәм шиғриәт нигеҙҙәренә өйрәтә. 15 йәше тулғас, атаһы йәш егеткә үҙ хужалығынан, малынан өлөш бүлеп бирергә теләй, әммә Зөрдөшт атаһынан уның билбауын ғына һорап ала һәм ете йылға кешеләрҙән ситләшә. Ул Ардабиль эргәһендәге тауҙарҙа, Даредж йылғаһы буйында йәшәй, сыр менән генә туҡлана. Ошо мәлдә ул аллалар Ахура Мазда, Баһуман, Аша Вахиста, Кшатра Варья, Спента Арматья, Хаурватат һәм Амеретат менән әңгәмәләшә тип иҫәпләнә. Тәүҙә уның тәғлимәтен ике туған ҡустыһы Майдхъой-Маонху ғына ҡабул итә. Һуңынан Зәрдөшт тағы ла ете тапҡыр Ахура Мазда һәм алты тапҡыр Амеша Спента менән әңгәмәләшә тип иҫәпләнә.

Зәрдөшт үҙ тәғлимәтен таратыу маҡсатында төрлө төбәктәргә йөрөй, әммә уны ҡабул итмәйҙәр. Ғәрәп Табари: «... ул тәүҙә Адербейджанда йөрөй, Балк ҡалаһындағы батша Виштаспаға бара», — тип яҙа. Ибн-әл-Атир (XII быуатта йәшәгән ғәрәп тарихсыһы): «Үҙ китабы менән Зәрдөшт Адербейджандан Фарасҡа (Әзербайжандан Иранға) бара, әммә китапта яҙылғанды берәү ҙә аңламай. Унан ул Һиндостанға бара һәм китабын ундағы батшаға күрһәтә. Төрөктәр менән ҡытайҙар уны үҙ ерҙәренән

ҡыуып сығара. Фирғәнәгә бара, ундағы батша үҙен тотоп үлтерергә ҡуша. Фирғәнәнән ул ҡасып ҡотола. Ҡайтҡас, Лохрасп улы Виштаспа уны зинданға ябырға ҡуша».

Батша Виштаспа Зәрдөштө тәүге тапҡыр б.э.т. 630 йылда күрә. «Зат-Спарам» һәм «Зардушт-Намэ» раҫлауынса, был «Спендармат айының Аперан» көнөндә (14 февраль — 20 март) Балк ҡалаһы ситендә ойошторолған яҙ байрамында була. Йыйын Даитьи (хәҙер Кизил-Узен) йылғаһына ҡушылған Аэватак йылғаһы буйында була. Был төбәктә кеше йәшәмәй, ҡамыш араһында ҡабан сусҡалары ғына мыжғып тора.

Виштасп ул осорҙа Иранды күп һанлы магтарҙан («Авеста»ла улар киг, карап, кави, карпан тип күрһәтелә) арындырып, көслө монотеистик дин тирәһендә туплауҙы маҡсат итеп ҡуя. Зак исемле караптың йоғонтоһо айырыуса көслө була. Ибн-әл-Атир яҙыуынса, Виштаспа (Каи Гуштаспа) менән тәүге тапҡыр йыйында осрашҡанда Зәрдөшт уны усында ут яндырып ғәжәпләндерә: «... уның усында ут яна, ул ут менән уйнай, әммә ҡулдары бешмәй...» Ләкин «уттар иле» Атропатенала был «мөғжизә» күптәргә билдәле була: спирттар, газойль һ.б. еңел фракциялар нефттән айырып алынып, магияла киң ҡулланыла. Ул шыйыҡсаларҙы, мәҫәлән, усҡа һалып яндырырға ла мөмкин — ҡул бешеп өлгөрмәй, уста бер ниндәй эҙ ҡалмай.

Мәкерле Зак Зәрдөштөң әйберҙәре араһына эт, бесәй тырнаҡтары һәм башҡа сихыр атрибутикаһы ташларға ҡуша. Батшаға алдап ошаҡлап, Зөрдөштө зинданға ташлайҙар. Ошо мәлдә Виштаспаның аты сирләп китә — хайуан аяҡтан яҙа. Батша Зәрдөштән шикләнә, уныһы иһә атты дауалап ҡарарға була. Зәрдөшт: «Мин дүрт шарт ҡуям, шулар үтәлеү менән атың аяғына баҫасаҡ!» — ти. Виштаспа тотҡондо тыңларға була. Зәрдөшт батшаның яңы динде ҡабул итеүен, уны тирә-яҡҡа таратыу өсөн ғәскәр биреүен, батша ҡатынының да динде ҡабул итеүен, Закты язалап үлтереүен шарт итеп ҡуя. Виштаспа быларҙың барыһын да үтәргә һүҙ бирә, ә Зәрдөшт батшаның атын аяҡҡа баҫтыра. Был турала «Зардушт-Намэ», «Динкард» китаптары һәм Хорасанда йәшәгән Шахрастани яҙа.

Виштаспа бөтә илгә яңы динде ҡабул итергә ҡуша. Ҙур һуғыш ҡуба, ул 12 ил ерендә алып барыла. Ирандар динде Уралға тиклем, йәғни Туран ерендә лә урынлаштыра. Иран ғәскәре менән Виштаспаның улы Әсфәндиәр етәкселек итә. Зәрдөшт батша һарайында ҡала һәм вәзир Фрашаостраның ҡыҙы Хвогвиға өйләнә. Фрашаостраның ҡустыһы Джамаспа Зәрдөштөң ярҙамсыһы, киләсәктә уның эшен дауам иттереүсе итеп тәғәйенләнә. Аҙаҡ Джамаспа б.э.т. 594 йылда Зәрдөшт тураһында «Авеста һәм Зенд» тигән китап яҙа.

Зәрдөшт батша Виштаспа хаҡына Кишмар ҡалаһындағы (Хорасанда) утҡа табыныусылар ғибәҙәтханаһы алдына изге кипарис ағасы ултырта. Дин бөтә Кесе Азияға, Туранға, Төньяҡ Һиндостанға тарала. Динден таралыуын тасуирлап күрһәткән «Спенд-Наск» («Авеста»ның 11-се китабы) юғалтылған һәм ошо осор тураһында пехлеви трактаты «Дин-Виджиркард» бирген мәғлүмәттәр аша белергә мөмкин. «Бахман-Яшт» китабы раҫлауынса, һуғыш бик оҙаҡ бара. Әсфәндиәр был эште тамамлап өлгөрмәй, уны улы Баһуман дауам итә. Китапта: «Арташир Каи, йәғни Вохуман, Спенддат улы ғына динде бөтә донъяға таратыуға өлгәште», — тиелә был һуғыш тураһында. Ибн-әл-Атир һуғыштарҙа ифрат күп халыҡ һәләк булыуы тураһында яҙа.

Туранда, «Авеста»ла яҙылыуынса, дини һуғышты «Туран кешеһе Исванта, Вараза улы» етәкләй. Был төбәктә үҙен күрһәткән икенсе кеше — Иоиштойо Фрьяна, шулай уҡ туранлы. Фрьяна Туранда игенселекте үҫтереүгә һәм Акхтья исемле дошманды тар-мар итеүгә күп көс һала. Яҙмаларҙан күренеүенсә, иң ауыр һуғыш Туранда бара һәм был һуғыш ғәмәлдә Иран—Туран һуғышы төҫө ала.

Төньяҡ Һиндостанда зәрдөштилек дине һуғышһыҙ индерелә: брамин Чангрангхачаха үҙе динде

ҡабул итеп, тарата башлай. Был турала «Зардушт-Намэ» китабы авторы Зардушт Бахрам Паджу «Чангрангхачаха-Намэ» исемле поэтик китап яҙа.

Яңы дин Иранда еңеп сыҡҡас, «Авеста» яҙыла башлай. Уның тәүге китаптарын Зәрдөшт үҙе яҙған тип иҫәпләнә. Табари яҙыуынса, «китаптар 12 мең күн пергамент битендә алтын онтағы ҡушылған буяу менән яҙылып, Виштаспа уларҙы Истакхра ҡалаһындағы Дарбишт тигән урынға һаҡлауға ҡуя. Башҡа сығанаҡтар раҫлауынса, тәүге китаптарҙы Зәрдөшт һөйләгәндәр буйынса Джамаспа (Зәрдөштөң ҡайнағаһы) яҙа һәм Шапиган һаҡлағысына һала. Ошо изге эш тамамланғас, Зәрдөшт төрлө төбәктәрҙә Изге уттар тоҡандырып, уларҙы ҡәҙерләп һаҡларға ҡуша.

**Атур Фарнбах** (Ут бағыусылар усағы) руханиҙарға бағышлана һәм Хорасмиҙа тоҡандырыла, аҙаҡ Кабулға күсерелә.

**Атур Гушнасп** (Һуғышсылар усағы) Аснаванд тауында, Урмия күле буйында тоҡандырыла.

**Атур Бурзян Митро** (Эшсе кешеләр усағы) Хорасанда, Раэванд тауында, Совар күле эргәһендә тоҡана.

Инглиз ғалимы доктор Вест раҫлауынса, Иран менән Туран араһындағы беренсе бөйөк һуғыш б.э.т. 601 йылда уҡ башлана. Туран ғәскәре менән юлбашсы Ареджатаспа (Арджаспа) етәкселек итә. Арджаспа үҙ тирәһендә Туран, Төркөстан халыҡтарын туплауға өлгәшә. Был һуғыштар тәү төркиҙәр өсөн берләшеү, көс һынауҙа тәүге етди тәжрибә мәктәбе була. Арджаспа 17 йыл эсендә ике тапҡыр иран ғәскәрен тар-мар итеп, Ирандың үҙенә бәреп инеүгә өлгәшә. Был турала «Ядкар-И-Зариран», «Шахнамэ», «Динкард» китаптарында ентекләп яҙыла.

Б.э.т. 601 йылда Арджаспа Виштаспаға һалым түләүҙе тиҙләтеү талабын ҡуя. Әгәр Виштаспа яңы диндән баш тартып, Зәрдөштө ҡулға алһа, Иранды Туранға һалым түләүҙән азат итәсәге тураһында белдерә. Кире осраҡта иһә ике айҙан һуғыш менән киләсәген әйтә.

Арджаспа Иранға 144 меңлек ғәскәр менән бәреп инә, резервы менән бергә уның 300 мең һуғышсыһы була. Иран ғәскәрендә 150 меңгә яҡын кеше була. Иран яғы был һуғышта 30 меңгә яҡын яугирен юғалта, әммә Әсфәндиәр Арджаспаны илдән ҡыуа. Туран тәүге һуғышта еңелгәс, б.э.т. 601-583 йылдар араһында тыныслыҡ урынлаша. «Динкард» раҫлауынса, ошо осорҙа Джамаспа «Авеста»ны яҙа (Зәрдөшт һөйләгәнде). Виштаспа һуғыш тамамланды тип тынысланa һәм, ялғанға ышанып, Әсфәндиәрҙе зинданға ташлай.

Арджаспа, Әсфәндиәрҙең ҡулға алыныуы тураһында ишеткәс, яңы һуғышҡа әҙерләнә башлай. 583 йылда турандар Иранға бәреп инә. Балк ҡалаһында Виштаспаның атаһы Лохрасп һәм Зәрдөшт үлтерелә. Пехлеви китабы «Зат-Спарам» күрһәтеүенсә, Зәрдөшт 77 йыл һәм 40 көн йәшәп, яңы замандың 48-се йылы башында Туран кешеһе Братрокреш (Тур-И-Братарквaш) ҡулынан һәләк була: «48-се йылда, Заратуштра Артавахшито айының Кхур көнөндә... вафат булды». Йыл иҫәбе ул мәлдә Зәрдөшт яңы динде тарата башланған мәлдән алып иҫәпләнә — унан һуң теүәл 47, Виштаспа динде ҡабул иткәндән һуң 35 йыл үтә. «Динкард» та был мәғлүмәтте ҡабатлай.

«Шахнамэ» тасуирлауынса, Виштаспа ул мәлдә Хорасан яҡтарында була. Джамаспа, Зәрдөштө тыңлап, Әсфәндиәрҙе зиндандан сығарып өлгөрә. Әсфәндиәр ғәскәр менән етәкселекте үҙ ҡулына ала.

Турандар иһә Балк ҡалаһын баҫып алып, Зәрдөштө Нуш-Атар ғибәҙәтханаһында, шундағы 8 рухани менән бергә үлтерә. Төрки кешеһе Братрокреш уларҙы һуйып, ҡандарын ағыҙып, шул ҡан менән изге Нуш-Атар утын һүндерәләр. Виштасптың атаһы Лохрасп та шул уҡ көндә үлтерелә. Әсфәндиәр ул арала турандарҙы еңеп, ҡалаға бәреп инә. Төрки һуғышсыһы Братрокреш әсиргә эләгә һәм уны Зәрдөштөң тиҫбеһе менән быуып үлтерәләр.

Ирандар бөтә Туран илен утҡа тотоп, тулыһынса буйһондора һәм

үҙ динен индерә. Арджаспа яуҙа үлә. Аҙаҡ Әсфәндиәр ҙә Рөстәм менән килеп сыҡҡан низағ һөҙөмтәһендә һәләк була — ул турала Фирҙәүси яҙа. Джамаспа б.э.т. 567 йылда үлә — ул үҙ эшен улы Хангаурушҡа тапшырып ҡалдыра.

Зәрдөштән һуңғы осорҙа, «Бахман-Яшт» китабы яҙыуынса, диндә һаҡлау өсөн Әсфәндиәрҙең улы Баһуман бик күп эштәр эшләй. Сығанаҡтарҙа уның Арташир Каян, Арташир Дираздат тигән исемдәре лә йыш килтерелә. Европа авторҙары уны Артаксеркс, Шәреҡтекеләр Әрҙәшир тип иҫкә ала. Ахеменидтар династияһы диндә артабан нығыта һәм Туранға, Үҙәк Азияға иғтибарҙы арттыра. Зороастризм ифрат ҙур территорияла Искәндәр (Александр Македонский) яуына тиклем хакимлыҡ итә. Ләкин Искәндәр зәрдөштилекте юҡҡа сығара алмай, сөнки үҙе алмашҡа бер ниндәй яңы дин тәҡдим итмәй. «Спенд Наске»ла әйтелеүенсә, элекке 12 илдән 7-һе зәрдөштилеккә тоғро ҡала, Туран да шуларға инә. Дин көнсығышта Бомбейға, төньяҡта Рифейға (Уралға) тиклем тарала, тип яҙа китап.

Бөгөнгө көндә зороастризм Һиндостандың Гуджарат штатында (150 мең зәрдөшти), Иранда (20 мең), Пакистанда (3 мең) һаҡланған. Зәрдөштиҙәр Әзербайжандың Сурахан ҡасабаһында йәшәй, унда уларҙың Атур-Сигах ғибәҙәтханаһы бар. Халыҡ хәтерендә зәрдөштилек Науруз байрамында һ.б. сығылыш таба. Һуңғы йылдарҙа ул боронғо дин АҠШ, Англия, Германияла популярлаша — унда 6 мең кеше үҙен зәрдөшти тип иҫәпләй. Улар «Авеста» китаптарын төрлө телдәрҙә пропагандалай. «Авеста»ның ҡыҫҡартылған варианты — «Хөрт Авеста» хәҙер бөтә донъяла бик популяр. Һуңғы ваҡытта беҙҙең Башҡортостанда ла боронғо динебеҙ зәрдөштилек, «Авеста», «Шахнамә» китаптары менән ҡыҙыҡһыныу арта, әммә был эштә фарсы теле белгестәре булмауы ҡамасаулай. 1917 йылға тиклем мәҙрәсәләрҙә тел уҡытылған, зыялылар Фирҙәүси, Низами һ.б. авторҙарҙың әҫәрҙәре менән оригиналда таныша алған. Күптәрҙең фекеренсә, артабанғы милли-мәҙәни үҫеш өсөн (айырыуса әҙәбиәттә, шиғриәттә) Башҡортостанда фарсы телен уҡытыуҙы, тәржемә эшен тергеҙеү зарур.

* * *

Туран киңлектәрендә, шул иҫәптән беҙҙең башҡорт этносы формалашҡан территорияла зәрдөштилек яҡынса б.э.т. 600 йылдан алып беҙҙең эраның 300 йылына тиклем, йәғни туғыҙ быуат дауамында өҫтөнлөк иткән. Был дәүер көслө иран баҫымы һәм йоғонтоһо осоро була. Нәҡ ошо осорҙа Уралға иран ҡәбиләләре (бөрйәндәр һ.б.) күпләп килеп төпләнә. IV быуат башында төрки донъяһы үҙендә берләшеү өсөн көс табып, үҙ динен — тәңреселекте булдыра һәм иран йоғонтоһонан арына башлай. Тәңреселек беҙҙә ислам дине килгәнсе, йәғни ете быуат самаһы йәшәй.

Яңы дингә нигеҙ һалыусы Дәдә Коркут үҙенең төп маҡсаты итеп барлыҡ төркиҙәрҙе берләштереүҙе ҡуя. Был берләштереүҙе ул уғыҙҙар менән ҡыпсаҡтарҙан башлай, ә дин тәүҙә уғыҙҙарҙа төпләнә.

Боронғо тарихҡа мөрәжәғәт иткәндә, тәңреселектең тамырҙары байтаҡҡа тәрәнерәк, әлбиттә. Француз Жан Поль Ру, мәҫәлән, алтайҙар беҙҙең эраға тиклем үк Гёй-Тәңрегә табынған, тип раҫлай. Ҡытай сығанаҡтары Тибет халҡының б.э.т. V быуатта Күк Тәңрегә табыныуы тураһында яҙа. Әммә Дәдә Коркут тәңреселекте ифрат ҙур территорияла, бөтә төркиҙәр араһында таратып, уларҙы берләштереп, мәҙәни, социаль, сәйәси йәһәттән дөйөм прогреска этәргес көс биреп, бөтә Туран донъяһын, төркиҙәрҙе үҙҙәренсә йәшәргә, үҙ яҙмышының хужаһы булырға өйрәтә, йәғни тәңреселекте иң юғары баҫҡысҡа — халыҡтарҙы тәрбиәләрлек, үҫтерерлек көс кимәленә еткерә.

Дәдә Коркут 203 йылдың йәйендә Дербент ҡалаһында тыуған (бөгөнгө көндә ул Дағстанға ҡарай). Ҡаланың боронғо исеме — Дедебин, уға б.э.т. 3960 йылда Элат дәүләте нигеҙ һала. Беҙҙең эраның башында унда уғыҙҙар төпләнә башлай.

Коркут 13 йәшлек малай сағында, 216 йылда ҡамлаусылар менән Алтайға китә. 220 йылда ул, шаман титулы алып, Аму-Дарья һәм Сыр-Дарья буйлап мәғрифәтселек миссияһы ҡыла. Уға Дәдә титулы бирелеп, исеме Дәдә Коркут булып китә. Дәдә титулы алыу өсөн руник яҙманы, тарихты, күп телдәрҙе белеү талап ителә. Коркут бик зирәк кеше була, телдәргә бик тиҙ өйрәнә. 221 йылда Байкал, Балхаш төбәктәренә, Орхон-Йәнәсәй үҙәненә сәйәхәт ҡыла. Ул төбәктәр заманында бай, юғары мәҙәниәтле, ҙур мәғрифәтселек төбәктәре иҫәпләнә. Төрки руник яҙмаһы шул яҡта барлыҡҡа килеүе генә лә унда юғары цивилизация булыуын раҫлап тора. Төбәк Үҙәк Азия, Ҡытай, Һиндостан менән сауҙа итә, бай йәшәй. 222 йылда Дәдә Коркут Тибетҡа килә һәм өс йыл белем ала. Лхаса ҡалаһынан (Тибет дәүләтенең баш ҡалаһы) алыҫ түгел урынлашҡан Тәңре күле эргәһендә йәшәгән, күк аллаһы Тәңрегә табынған тибет ҡәбиләләренә иғтибар итә. Тәңре күле 7111 метр бейеклегендәге Кайлас тауынан алыҫ түгел урынлашҡан. Тирәләге тауҙар теҙмәһен халыҡ Тэнгри-Тао, ә күлде Тэнгри-Нур тип йөрөтә (хәҙер ҡытайҙар күлдең исемен Нам-Цо тип үҙгәрткән һәм карталарға шулай яҙалар). Ошо Тәңре исеме Дәдә Коркуттың барлыҡ артабанғы булмышын, эшмәкәрлеген билдәләй.

225 йылда Дәдә Коркут Һиндостанға килә һәм унда өс йыл була. 228 йылда ул Көньяҡ Иранға, 230 йылда Тегеранға барып сыға һәм зәрдөштилекте ныҡлап өйрәнә. Артабан ул хәҙерге Ираҡ, Сүриә, Төркиә ерҙәре аша үтеп, урындағы халыҡтарҙы өйрәнә.

Ниһайәт, 243 йылда 40 йәшлек Дәдә Коркут Дербентҡа ҡайта. 27 йыл дауамында ул төркиҙәр йәшәгән бөтә төбәктәрҙе тиерлек байҡап сыға һәм туғандаш халыҡтарҙы берләштереү идеяһына яҡынлаша. Дәдә Коркут эште уғыҙҙарҙың күршеләре ҡыпсаҡтарҙан башларға була һәм 263 йылда уларҙың баш ҡалаһы Кимевҡа (хәҙерге Киев) килә. Унда 66-73 йылдарҙағы иудей һуғышынан һуң Палестинанан ҡасҡан йәһүдтәрҙең идеологик йоғонтоһо көслө була. Шул ҡотҡоға бирелгән ҡыпсаҡтар Дәдә Коркутты Кимевтан ҡыуып сығара.

Дәдә Коркут Дербентҡа ҡайта һәм шәкерттәр әҙерләү, төрлө төбәктәрҙә ғибәҙәтханалар төҙөү эшенә тотона. Ғибәҙәтханалар төрлө ерҙә төрлөсә атала: кимсе, кесис, кешин, кес, урват, ирват, арват, ибадат, гибадет һ.б. Тәңреселектең төп тамғаһы итеп әүернә (свастика) алына.

Тәңреселек идеяһы бөтә төрки донъяһын берләштереп, зәрдөшти Иран йоғонтоһонан арыныу юлы булараҡ торған һайын нығыраҡ төҫмөрләнә. Икенсе яҡтан, көсәйә башлаған Византияға, яңы ғына барлыҡҡа килгән христиан диненә лә ҡаршы тороу талап ителә. Ҡыпсаҡтар араһына үтеп ингән, Кимевта нығынған иудаизм хәүефе лә үҫә.

300 йылда Дәдә Коркут дини реформа эшенә тотона. Был ҙур һуғышҡа килтерә: уғыҙҙар «яфыр»ҙарға ҡаршы яуға күтәрелә. Рим императоры Диоклетиан менән һуғышҡан ирандар уғыҙҙарҙы хыянатсы тип күрһәтә һәм Дәдә Коркутты юҡ итеүҙе төп маҡсат итеп ҡуя. Тегеран төркиҙәрҙе Римға ҡаршы һуғышҡа йәлеп итергә ынтыла. Хәлде төньяҡта гunndарҙың көсәйеүе ҡатмарлаштыра — улар Уралға тиклемге ҙур территорияны ҡулға эләктерә һәм Көнбайыш Европаға табан хәрәкәт итә башлай. Рим империяһының төньяғына гунн яуының тәүге тулҡыны килтереп бәргәс, Диоклетиан Ирандан китә. Ирандар хәҙер бөтә көсөн төркиҙәргә ҡаршы йүнәлтергә йыйына. 303 йылдың башында 100 йәшкә етеп килгән Дәдә Коркутты ялланған үлтереүселәр һәләк итә. Рим легионерҙары һәм ирандар үҙҙәренең ҡул аҫтындағы бөтә төбәктәрҙә кесистарҙы емертә, ундағы китаптарҙы юҡ итә башлай.

Дәдә Коркут үҙенә алмашҡа етеү ҡыусы әҙерләй. Өсәүһе даими эргәһендә була һәм ирандар уларҙы остаз менән бергә үлтерә. Иҫән ҡалған икәүһе Византияның баш ҡалаһы Константинополгә ҡаса, икәүһе Урта Азияға, аҙаҡ Алтайға китә.

Византия императоры Константин Дербентҡа ярҙам күрһәтергә ризалаша һәм ун йыл үткәс, 313 йылда уғыҙҙар менән килешеү төҙөй. Килешеүгә ярашлы, Константинополь төркиҙәргә Иранға ҡаршы тороуҙа ярҙам күрһәтә. Византияла Дәдә Коркут китаптарын грек һәм латин телдәренә тәржемә итәләр. Быны төрки сығышлы белем эйәһе Кесе Дионисий башҡарған тип иҫәпләнә. Коркут китаптарындағы идеялар аҙаҡ изге Григорий китаптарында һүҙмә-һүҙ ҡабатлана, Рим был китаптарҙы тыя. Палестинала ла ҙур кесис төҙөлә һәм унда ислам диненә нигеҙ һалыусы сауҙагәр Мөхәммәт тә килеп йөрөй. Күрәһең, уны ла Коркут мираҫы, монотеистик дин төҙөү теорияһы һәм тәжрибәһе етди ҡыҙыҡһындыра.

Башҡорт халҡы формалашҡан төбәктәргә тәңреселек гунн империяһы тарҡалғас ҡына (453 йылда Атилла — ысын исеме Атли Оттован — үлгәс кенә) ныҡлап үтеп инә башлай. Тәңреселек Дунайҙан алып Байкалға, Каспийҙан алып Уралға тиклемге ҙур төбәкте еңә. Дини һуғыштар оҙаҡ дауам итә һәм бик ҡаты була. Улар Башҡортостанды ла урап үтмәй, әлбиттә. Мәҫәлән, бөрйән-ҡыпсаҡ, мең-ҡыпсаҡ һуғыштары шул дәүергә ҡарай. Шуға ҡарамаҫтан, был башҡорт этносы формалашыуында ыңғай күренеш була: **төрки элементы бер төбәктә йәшәгән фин-уғыр элементын, зәрдөштилек дәүерендә килеп төпләнгән иран сығышлы ҡәбиләләрҙе һәм гунн ҡалдыҡтарын үҙ тирәһендә туплап, бөгөнгө башҡорт халҡына нигеҙ һала**. Шунан һуң ете быуат дауамында, ислам дине үтеп инә башлағанға тиклем, йәш башҡорт халҡы, сағыштырмаса тыныс шарттарҙа йәшәп, артабанғы үҫеш, берләшеү өсөн мөмкинлек ала.

Тәңреселек еңһә лә, башҡорттарҙа зәрдөштилек, боронғо мәжүсилек элементтары ла һаҡлана һәм беҙҙең көндәргә тиклем килеп етә. Әлбиттә, нимәлер эҙһеҙ юғалтыла...

Һүҙҙең аҙағында «Китаби дәдә Коркут» тураһында әйтеп үтәйек. Эпостың ике ҡулъяҙма китабы һаҡланған. Дрезден музейы китапханаһындағы ҡулъяҙманың авторы — **Абдаллах ибн Фарадж**. Ул 1482 йылда яҙылған һәм **«Китаби дәдә Коркут»** тип атала, 12 хикәйәттән тора. Фарадж 203-303 йылдарҙа йәшәгән Коркутты «мосолманлаштырып», әле бөтөнләй тыумаған ислам дине өсөн көрәшсегә әйләндерһә лә, әҫәрҙә тәңреселек өсөн көрәш дәүере бик асыҡ булып күҙ алдына килеп баҫа.

Ватикан китапханаһында һаҡланған китап **«Хикайети огузнамэ Казанбек ва Гейрох»** тип атала һәм алты хикәйәттән тора. Киң уҡыусыға ул билдәле түгел.

«Китаби дәдә Коркут»тың рус теленә иң тулы, камил тәржемәһе 1989 йылда Бакуҙа ҙур тираж менән нәшер ителде. (**«Книга отца нашего Коркута». Баку, «Язычы», 1989г. Перевод А.Ахундовой. 30000 экз.**)

Руссаға тәүге тәржемәнең авторы академик **В.В. Бартольдт**. Ул әҫәрҙәге шиғырҙарҙы айырып тормайынса, проза рәүешендә генә бирә.

Төркиәлә китап 1976 йылда донъя күрә. Авторы — күренекле ғалим, Әхмәтзәки Вәлидиҙең яҡын дуҫы **Орхан Шаик Гёккяй**.

«Китаби дәдә Коркут» инглиз теленә лә тәржемә ителгән. Тәржемәсеһе — **Джеффри Левис**. Китап 1974, 1982 йылдарҙа «Penguin books» нәшриәтендә баҫыла. Күрһәтелгәндәрҙән тыш, китаптың немец теленә лә тәржемәһе бар, әммә ул әҙәби тәржемә тип иҫәпләнмәй һәм академик формала эшләнеп нәшер ителгән.

Башҡорт теленә «Китаби дәдә Коркут» әлегә тәржемә ителмәгән. Тимәк, Коркуттың барлыҡ төркиҙәрҙе берҙәмлеккә, азатлыҡҡа саҡырған һүҙҙәре әлегә беҙгә килеп етмәгән.

Ул арала Америка Ҡушма Штаттары ла төркиҙәрҙең бөйөк остазының исемен пропагандалауға өлөш индерҙе: берлектәге Америка-Әзербайжан нефть компанияһының Каспий диңгеҙендә эшләгән гигант платформаһы «Дәдә Коркут» тип атала.